■ Уйлан

## ОЛО ҠУНАҠТЫ ҠАРШЫ АЛЫРҒА ӘҘЕРҺЕҢМЕ?

Ленар ХӘЙРЕТДИНОВ

Рамаҙан тән өсөн ауыр, ләкин йән өсөн еңел булған утыҙ көнлөк ай. Ғөмүмән, ураҙаны фикх буйынса бер нисә төргә бүлергә була: фарыз, сөннәт, нәфел һ.б. Йән ураҙаһы - нәфсене тыйыу, аҡыл ураҙаһы хис-тойғоларҙы дилбегәләү, ағзалар ураҙаһы - ашау-эсеүҙән, яҡынлыҡ ҡылыуҙан тыйылыу.

Һәр беребеҙ иман юлынан ныҡлап барырға ҡамасау иткән етешһеҙлектәребеҙҙе беләбеҙ, шуға ла уларҙан ҡотолорға тырышабыҙ. Ләкин кеше ниндәй гонаһтарынан, ҡайһыныһынан иң тәүҙә арынырға теләгәнен асыҡларға тейеш. Кемдер нәфсеһенең боҙоҡ теләктәренән, кемдер ғәйбәт һөйләүҙән, кемдер рыянан азат булырға тырыша. Ә кемдер - гонаһлы эштәрҙән. Һәр хәлдә, Рамаҙан айы кәмселектәрҙән ҡотолоу мөмкинлеге бирә. Был айҙа шайтан вәсвәсәһе көслө булмай, хатта үҙ булдыҡлылығына әллә ни ышанмаған мосолман да, бер аҙ тырышлыҡ һалып, шайтан ҡотҡоһонан ҡотола, үҙенең гонаһтарын юҡ итә ала.

Бөтәбеҙ ҙә фарыз ураҙаһын тоторбоҙ, иншә Аллаһ. Ошо теләккә үҙенде көйләү һәм ураҙаны ниәтләүҙең бик тә мөһим икәнен иҫтән сығармайыҡ. Шул уҡ ваҡытта, һәр яуаплы сара алдынан беҙ бит, ғәҙәттә, репетиция ла яһайбыҙ. Рамаҙанға ла әҙерләнергә кәрәк. Ысынбарлыҡта, Рамаҙанға әҙерлек йыл буйы барырға тейеш. Аллаһ Рәсүле (с.ғ.с.): "Рамаҙандан алып Рамаҙанға ҡәҙәр гонаһтарҙы ярлыҡау..." - тип юҡҡа ғына әйтмәгән.

Ислам ғәлимдәре тоткан ураҙа өсөн биреләсәк әжерҙе шартлы рәүештә бер нисәгә бүләләр:

Ашау-эсеүҙән генә тыйылған кешенең ураҙаһы - йолаға эйәреү.

Риба алыуҙан, харамдан тыйылып, ә кис етеү менән уны рәхсәт ителгән, тип, ҡарағандың ураҙаһы - ғибәҙәт.

Аллаһы Тәғәләгә генә ғибәҙәт итеп, гонаһтарҙан, харамдан тыйылғандың ураҙаһы - ризалыҡ.

Бөтөн насарлыҡтан тыйылғандың, тәүбә итеүсенең ураҙаһы - тәҡүәлеләрҙең ураҙаһы.

Ғәйбәт һөйләүҙән, яла яғыуҙан тыйылған, Ҡөрьән уҡығандарҙың ураҙаһы - ныҡлы иманлылар ураҙаһы.

Рыялыҡтан тыйылып, ихласлыҡта булғандарҙың ураҙаһы - бәрәкәтле ураҙа.

Сикһеҙ ризалыҡ менән Аллаһы Тәғәләгә шөкөр итеп, үҙенең нәфсеһенә, теләктәренә ҡаршы тороп, ураҙа тотоусының ураҙаһы - бәхеткә өлгәшкәндәрҙең ураҙаһы.

Беҙ ниндәй ураҙаны тоторбоҙ һуң, Ураҙаға ни ҡәҙәр әҙербеҙ, ғөмүмән, уға йыл буйы әҙерләндекме - бөтәһе лә тик шунан ғына тора. Ныҡлы әҙерлектә торабыҙ икән, беҙ ҡунаҡты, әлбиттә, лайыҡлы ҡаршы ала аласаҡбыҙ, ә ҡунаҡ бүләкһеҙ килмәй. Шулай булғас, беҙҙең ураҙаны, ғибәҙәт кеүек үк, кәнәғәтлек, тәҡүәлек, сәләмәтлек, именлек, иман эсендә ҡаршы алғыбыҙ килмәйме ни!?

■ Илһам

## ТӘҢРЕ РУХЫ



Риф МИФТАХОВ,
*журналист, яҙыусы. Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре*

"Лә иләәһә илләллаһ,
Мөхәммәдәр-рәсүлүл-лаһи..."
Ошо бөйөк юлдарҙан
Башлана шиғри яҙмам,
Рамаҙан - изге айҙан.

...Эй, һин, бәндә, тупраҡтан
Ирке менән Хоҙайҙың
Аҡ донъяға тыуғанһың:
Тәңре рухы - тәнеңдә,
Тәңре рухы - көнеңдә.
Уның рухы яҡтыра
Йөҙеңдә, күҙҙәреңдә,
Күңелдә, йөрәгеңдә.

Уның рухы йоҡмаһа,
Йәшәү рухы юҡ таһа.
Тәне ерҙә торһа ла,
Былдай заттың һис кенә
Йәне булмай донъяла.

Йәнле булыу - аңында.
Хоҙай биргән аҡылда:
Яманлыҡтар ят булһа,
Миһырбанлыҡ, шәфҡәтлек
Донъялыҡта хаҡ ҡылһа.

...Аҡыллылыҡ - нурлы йөҙ,
Хоҙай биргән "ете күҙ".
Әҙәмде һәм ғәләмде
Аңлап булмай өлләкһеҙ
Шулар аша күреүһеҙ.

Ете күҙҙең тәүгеһе -
Маңлай күҙе генә ул.
Тирә-яҡты күрә ул,
Әгәр һуңһә яҡтылыҡ
Кәрәге юҡ - һүнә ул.
Күңел күҙе - икенсе:
Ҡыл иләктәй һеҙеүсе -
Бөтәһен дә һиҙеүсе.
Һуҡырлыҡтан ҡотҡарып,
Алға шәмдәр теҙеүсе.

Өсөнсөһө - күҙҙәре
Ғилем менән белемдең:
Шунһыҙ һис бер асылмай
Киңлектәре күреүҙең,
Офоҡтары күңелдең.
Хыял күҙе - дүртенсе:
Өмөт менән янырға,
Ниәт менән барырға,
Киләсәккә бағырға,
Эҙләргә һәм табырға.

Бишенсеһе - Ер үҙе:
Тимәк, был - хәтер күҙе,
Уның аша асыҡлана
Үткәндең бөгөнгөһө,
Ул - киләсәк көҙгөһө.

Сер күҙе - алтынсыһы,
Үҙ-үҙенә төбәлгән
Күҙ була - етенсеһе.
Килереңде, кемлегеңде
Асыуҙа - улар сере...

"Айырырға өйрән һин
Аҡты, пакты - ҡаранан,
Хаҡлыҡ йөҙөн - нахаҡтан,
Хәләл эште - хәрәмдән,
Ғалимлыҡты - наҙандан..."

Аҡыл биргән асырға
Ер-Йыһандың ишеген.
Тик изгелек ҡылырға
Һәм сауаплы булырға
Тыуҙырған ул кешеһен.

Кеше -яҡшылыҡ ҡоло,
Кеше яҡтылыҡ нуры,
Булһын рухы юғары:
Шунда ғына күңелдә
Йәшәй Хоҙай иманы.

Ғөрөф-ғәҙәтең, йолаң -
Тәңре рухы, мосолман.
Мөхәммәт тарафынан
Беҙгә шулай ҡушылған:
Йәнебеҙ - Ислам, Иман.

■ Районда

# АҠЪЯРҘА ЙӘМИҒ МӘСЕТЕ АСЫЛДЫ

Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА

Июнь айы хәйбуллалар өсөн шатлыҡлы ваҡиға бүләк итте. Ни өсөн тигәндә, район үҙәге Аҡъярҙа йәмиғ мәсетен асыу тантанаһы уҙҙы. Ә изге йортто тәҙөү һигеҙ йыл элек башланғайны. Был сараға Урал аръяғы һәм Ырымбур өлкәһенән дә ҡунаҡтар килде. Улар araһында хәҙрәттәрҙең күплеген дә әйтергә кәрәк. Эйе, һуңғы ике тиҫтә йыл эсендә илебеҙҙә әҙерлекле, ғилемле дин әһелдәребеҙ үҫеп сыҡты. Иртәнге туғыҙҙа мәсет тирәһе халыҡ менән туп-тулы ине. Тирә-яҡты нурлап, күңелдәрҙе яҡтыртып, Ҡөрьән аяттары яңғыраны. Мәсетте асыу тантанаһында райондың хакимиәт башлығы Рөстәм Хәйруллин ҡатнашты. Мәсеттең имамы Юлай хәҙрәт был изге бинаны төҙөүҙә ярҙам иткән һәммәһенә лә - яҡташтарына, айырым предприятиеларға рәхмәтен еткерҙе. Башҡортостан мосолмандарының Диниә назараты мөфтөйө Нурмөхәммәт хәҙрәт Ниғмәтуллиндың сығышы шулай уҡ бик фәһемле булды. Әлбиттә, үҙебеҙҙең йолаларҙы һаҡлау, Әбү Хәнифә мәҙһәбенән икәнебеҙҙе белеү, ныҡлы дини ғилем алыу көнүҙәк булып тора. Башҡа хәҙрәттәрҙең дә фекерҙәре ауаздаш булды был саҡырыуға. Йәштәр менән эшләү, уларҙың рухи етәксеһе булыу тураһында әйтелде сығыштарҙа. Һүҙ юҡ, рухи донъя менән ҡыҙыҡһыныусылар бермә-бер арта бара. Олоһон да, кесеһен дә үҙенә йыйған әлеге сара шуның бер дәлиле ине.





Мөһабәт, матур, яҡты йорт үҙенә әллә ҡайҙан саҡырып тора. Уның эсендә күптәр ғилемдәрен ныҡытыр, иманға килер, Аллаһы Тәғәләгә яҡынайыр әле. Мәсетте асыу тантанаһы дуҫлыҡ, туғанлыҡ хистәрен тағы ла көсәйтте. Һәр яңғыраған фекер изгелек, иман менән йәшәүҙең бөйөклөгөн аңлатты, тормош асылыбыҙ тураһында тәрәнерәк уйҙарға һалды, Аллаһ һүҙенең бер ҡасан да юғалмаҫағын тағы ла бер мәртәбә раҫланы.

Сөнки үткән заман идеологияһы нисәмә тиҫтә йылдар буйы арҙаҡлы, мәшһүр дин әһелдәрен онотторорға, халыҡ күңеленән алып ташларға тырышһа ла, уларҙың исемдәре һәм ғәмәлдәре саф алтын шикелле яңынан балҡыны. Хәҙер уларҙың мираҫын өйрәнеүселәр арткандан-арта ғына бара. Быны шулай бүләклә Аллаһы Тәғәлә халҡына ысын йөрәктән хеҙмәт иткән, хәләл көсө менән йәшәгән шәхестәрен. Уларҙың рухтары һәр саҡ халҡы менән. Һәм быны аңлап йәшәү бөгөнгө кешеләрҙең күңеленә ҡанат ҡуя. Улар рух, дин тигән төшөнсәгә тағы ла тәрәнерәк ҡарап, хәләл менән харамды айырып, иман ҡеүәте менән йәшәй башлар тигән өмөт бар. Аҡъяр йәмиғ мәсетен асыу сараһы быны шундай уйҙар уятты күңелдә.